ВОСХОД
№46 (10093)
Пятница
24 ноября 2023 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

# АРҒУЖА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №11 (152)
НОЯБРЬ, 2023 ЙЫЛ

ТАРИХ

# ОНОТОЛҒАН ИСЕМДӘР

## ӘБДЕЛҒӘЛИМ ӘХМӘТ УЛЫ АЙҘАРОВ (1883–1937 ЙЫЛ) БЫНАН 140 ЙЫЛ ЭЛЕК ТЫУҒАН, ДӘҮЛӘТ ЭШМӘКӘРЕ, ПЕДАГОГ-МӘҒРИФӘТСЕ, ҒАЛИМ-ЛИНГВИСТ

**Кем генә булып эшләмәһен – Мәтәл ауылы китапханасыһы йәки Башҡортостандың мәғариф министры – бөтә ерҙә лә лайыҡлы ихтирам менән ҡаҙана. Уның биографияһы күп йәһәттән йәш Башҡорт республикаһының тәүге етәкселәре яҙмышын ҡабатлай: мәҙрәсәлә уҡыу, милли хәрәкәттә ҡатнашыу, яңы власть органдарын булдырыу, ҡулға алыныу һәм атып үлтерелеү.**

**ВӘРИС СИРАЖЕТДИНОВ,**
*«Иллекүл» район тыуған яҡты өйрәнеү берекмәһе ағзаһы.*

### ЙӘШЛЕК ЙЫЛДАРЫ

Ғәлим Айҙаров Ырымбур губернаһының Сәйет ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. 7 йәшендә атаһы улын Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсәһенә уҡырға бирә, унда Әбделғәлим 9 йыл уҡый. Уҡыуын туҡтатып, ул Ҡазанға китә. Бында Ҡазан уҡытыусылар мәктәбенең революцион ҡарашлы тәрбиәләнеүселәре менән таныша. Улар менән бергә студенттар сыуалыштарында ҡатнаша, ҡулға алына һәм төрмәгә ябыла. Унан уның ышаныслылығы тураһында үтенес яҙған ауылдаштары арҡаһында ғына сыға ала. Үтенес ҡағыҙға илле яҡташыбыҙ ҡул ҡуя.

Егет Ырымбурға ҡайтырға мәжбүр була. Аҡсаға ҙур мохтажлыҡ кисергәнлектән, ул башта Һамарға, ә һуңынан Аҡмулла улусының Петропавловск ҡалаһына күсеп килә, уҡытыусы-мөғәллим вазифаһын таба. Ишем йылғаһы буйында урынлашҡан ҙур булмаған боронғо ҡалала, үҙаллы уҡып, рус теле уҡытыусыһы исеменә имтихан тапшыра һәм уҡытыу менән шөғөлләнә. 1909 йылда Ғәлим Айҙаров Ташкентҡа күсеп килә, һәм ҡабаттан, үҙаллы шөғөлләнеп, тулы урта белем ала, урындағы реаль училищела өлгөргәнлек аттестатына имтихан тапшыра. Бынан һуң ул Ырымбурға ҡайта һәм «Хөсәйениә» мәҙрәсәһен тамамлап ҡуя.

### ТӘҮГЕ КИТАПХАНАЛАР

1914 йылда Абдулғәлим Айҙаров Ырымбур земствоһы тарафынан Силәбегә өйәҙ земствоһының халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире вазифаһына саҡырыла, унда ул ҡыҙыу эшмәкәрлек алып бара. Земстволар, урындағы үҙидара органдары булараҡ, мәғарифтың, шул иҫәптән мәктәптән тыш мәғарифтың барлыҡҡа килеүенә һәм үҫешенә етди иғтибар бүлә. Был өлкәләге йүнәлештәрҙең береһе китапхана эше була. Ул Силәбе өйәҙендә китапханалар селтәрен асыуҙы һәм киңәйтеүҙе күҙ уңында тота. Был маҡсатҡа байтаҡ аҡса бүленә.

Китапханалар район китапханаларына һәм районара китапханаларға бүленә. Райондыҡында эшләүсе китапханасының айлыҡ эш хаҡын 50 һум, район яны китапханасыһының эш хаҡы 15 һум тәшкил итә. 1915 йылдың 21 сентябрендә губернаторҙың 5444-се һанлы указы менән Мәтәл ауылында беренсе район китапханаһы, ә 5443-сө һанлы указы менән Ҡолой ауылында район яны китапханаһы асыла. Улар эргәһендә башҡорт халҡы өсөн милли грамоталылыҡ буйынса киске курстары асылды. Мәтәл ауылында китапхана өсөн бинаны земство мәктәптән йылына 144 һумға ҡуртымға ала. Китапхана 1915 йылдың 10 ноябрендә асыла. Беренсе китапханасы Абдулғәлим Айҙаров була. Земстволар китапханасыларҙы әҙерләү өсөн уларҙы Шанявский исемендәге Мәскәү ҡала халыҡ университетына командировкаға ебәреп уҡытып ала. Абдулғәлим Әхмәт улы бында китапханасылыҡ һәм мәктәптән тыш белем биреү буйынса 6 айлыҡ курстарҙа уҡый.

1917 йылғы февраль һәм Октябрь революцияларын Абдулғәлим Айҙаров Силәбелә ҡаршылай, ул ваҡытта ул ҡала башҡарма комитеты ағзаһы була һәм революцион ваҡиғаларға әүҙем ҡушыла. Гәзиттәрҙә баҫыла, күп һанлы съездарҙа ҡатнаша, билдәле большевиктар Ғ.К. Шәмиғолов һәм С.М. Цвиллинг менән таныша. Ҡала башҡарма комитеты уны Ҡазанға мосолман эштәре буйынса Комиссариат саҡырған бөтә Рәсәй мәғариф хеҙмәткәрҙәре съезына ебәрә. Был съезда Абдулғәлим Айҙаров комиссариат ағзаһы була һәм мәғариф өлкәһендә эшләү өсөн Мәскәүгә күсерелә.

### МӘҒРИФӘТСЕ ҺӘМ ПЕДАГОГ

Айҙаров үҙенең доклад яҙмаһында былай тип белдерә: «Комиссариаттың иң мөһим һәм төп бурысы – грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү, әммә республикала грамотаһыҙлыҡ шул тиклем таралған, уны туҡтатыу өсөн ҙур көс һәм матди сығымдар талап ителә». Нарком булараҡ, ул партияның өлкә комитеты һәм Башҡорт үҙәк башҡарма комитеты ағзаһы була. Был вазифала ҙур эштәр башҡара, Башҡортостанда халыҡ мәғарифын ойоштороуҙың күп проблемаларын хәл итә. Республикала мосолман мәғариф учреждениелары ябыла, улар урынына яңы типтағы мәктәптәр – 1 һәм 2 баҫҡыслы хеҙмәт мәктәптәре асыла. 1922 йылдың аҙағына Башҡортостанда 2 баҫҡыслы һигеҙ мәктәп һәм уларҙың береһе Мәтәл ауылында асыла.

1921 йылдың майында паиртия Үҙәк комитеты Абдулғәлим Айҙаровты Мәскәүгә саҡыртып ала, унда ул РСФСР Халыҡ мәғарифы комиссариатының төрки бүлексәһен етәкләй, бер үк ваҡытта Көнсығыш халыҡтарының Коммунистик университетында уҡыта, РКП Үҙәк комитеты ҡарамағындағы милли аҙсылыҡтарҙың татар-башҡорт секцияһы ағзаһы вазифаһын башҡара. 1922 йылдың авгусында Өфөгә ҡайта, унда Башҡортостан өлкә комитеты уны Халыҡ мәғарифы комиссариатының Башҡортостан буйынса сәйәсәт-мәғариф мөдире итеп тәғәйенләй. 1926-1928 йылдарҙа Абдулғәлим Айҙаров Ырымбурҙа Башҡорт педагогия техникумы мөдире булып эшләй, Өфөгә ҡайтҡас, «Башҡорт китап» нәшриәте рәйесе була. Бер үк ваҡытта ул «Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте»н ойоштороу башланғысында тороп, уның ғилми секретары һәм рәйес урынбаҫары була. Бында ул Нуриәғзәм Таһиров, Сәғит Мерәҫов кеүек ғалимдар менән эшләй. 1930 йылдан Ырымбур татар-башҡорт агропединститутында ассистент, ә һуңынан доцент була.

Абдулғәлим Айҙаров халыҡ мәғарифы буйынса 1-се Бөтә Башҡорт эшмәкәрҙәре съезы (1919 йылдың 27 декабре-1920 йылдың 4 ғинуары) саҡырылышы башлаусыһы була. Тап уҡытыусыларҙың беренсе съезында (1920 йылдан алып Стәрлетамаҡта сыҡҡан «Мәғариф эше» журналы сығып килгән була) республика ғилми-педагогик журналын сығарыу тураһында мәсьәлә ҡуйыла. Әлеге ваҡытта ул «Башҡортостан уҡытыусыһы» тип атала. Абдулғәлим Айҙаров мәктәптән тыш белем биреү буйынса белгес була. Ғәжәп түгел, 1921-1922 йылдарҙа уҡ Стәрлетамаҡта мәктәп йәшендәге балалар менән эшләү һәм балалар баҡсаларын ойоштороу методикаһы буйынса бер нисә бәләкәй брошюраһы сыға. 1924-1925 йылдарҙа Өфөлә ул «Ауылда ҡатын-ҡыҙҙар араһында сәйәси-ағартыу эше» һәм «Ауылда балалар баҡсаларын нисек ойошторорға» исемле методик ҡулланмаларын баҫтырып сығара. Шул уҡ ваҡытта Айҙаров яҙған «Ауылда һәм ҡалала сәйәси мәғарифта эшләү ысулдары» китабы, шулай уҡ рабфактар һәм техникумдар өсөн «Башҡорт теле буйынса эш китабы» дәреслеге донъя күрә.

Абдулғәлим Айҙаров рус, башҡорт һәм татар телдәренән тыш, үзбәк, ҡаҙаҡ, фарсы һәм ғәрәп телдәрен дә иркен белә. Бер нисә бөтә союз конференцияһында (Ташкент, Сәмәрҡәнд) ҡатнаша, һөҙөмтәлә уның үзбәк, ҡарағалпаҡ һәм башҡорт телдәренең сағыштырма орфографияһы (Өфө, 1929), боронғо башҡорт хаттарын яҙыу стиле (Өфө, 1929), башҡорт теленең орфографияһы буйынса эштәре баҫылып сыға.

Мәғрифәтсе һәм педагог Абдулғәлим Айҙаров, күп замандаштары кеүек үк, Сталин репрессиялары ҡорбаны була. 1937 йылдың 14 ноябрендә Ырымбур өлкәһе буйынса НКВД-ның өс кешеһе тарафынан атып үлтереүгә хөкөм ителә. 1957 йылдың майында аҡлана.

ВАҠИҒА

# КҮҢЕЛЛЕ БЕЙЕҮ

**Арғаяш сәнғәт мәктәбенең Ҡолой филиалының «Палитра» хореография коллективы «Шома бас» («күңелле бейеү») халыҡ-ара татар бейеүҙәрен башҡарыусылар конкурсы лауреаты булды. Фестиваль 2017 йылдан алып үткәрелә.**

Уны Бөтә донъя татарҙары конгресы, Татарстан Республикаһы һәм Свердловск өлкәһе мәҙәниәт министрлығы, Свердловск халыҡ ижады Һарайы ойошторҙо. Сәхнәлә Карелия Республикаһынан Ханты-Манси автономиялы округынан, йәғни Рәсәй Федерацияның 13 субъектынан коллективтар хореография оҫталығын күрһәтте. 6 йәштән 17 йәшкә тиклемге төркөмдә «Ансамблдәр» номинацияһында Ҡолой ауылы «Палитраһы» жюри һәм тамашасыларҙың таныуына лайыҡ булды, фестиваль дипломанты тип танылды.



ВАҠИҒА

# «ТАМСЫЛАР»: ЙОМҒАҠТАР

**18 солист һәм бер вокаль төркөм 29 октябрҙә Яңы Сувыл мәҙәниәт йортонда үткән «Тамсылар» балалар башҡорт йырын башҡарыусылар конкурсында ҡатнашты.**

**Милә СОЛТАНОВА,**
*проект авторы*




5 йәштән 14 йәшкә тиклем ҡатнашыусыларҙың йәше ике йәш категорияһына бүленде.

– Был «Тамсылар» конкурсы районыбыҙҙа балалар башҡорт телендә генә йырлаған берҙән-бер бәйге ул, – үҙ сығышында Нуркин үҙәкләштерелгән ауыл клубы директоры Э.Р. Вальшина. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп балалар башҡорт телен белмәү сәбәпле, конкурстан ситтә ҡалалар. Был конкурс балаларҙа йыр аша туған телгә ҡыҙыҡһыныу уятырға ярҙам итә. Был йәһәттән коллегаларымдың хеҙмәте ҙур, улар йырға һәләтле балаларҙы асыҡлай, улар менән вокал буйынса ғына түгел, туған телдәре өҫтөндә лә эшләй. Һеҙҙең емешле эшегеҙ өсөн рәхмәт!

**КОНКУРС ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ**

Ике йәш категорияһында 1-се дәрәжә лауреаттары:

Йәсмина Ҡотлохужина, етәксеһе – М. Солтанова (Яңы Сувыл ауыл мәҙәниәт йорто);

Радмилла Минғолова, етәксеһе – Г. Ирғужина (Хоҙайбирҙе ауыл мәҙәниәт йорто);

Ирина Шәйхисламова, етәксеһе – А. Итәкова (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Сабира Бәрҙиева, етәксеһе – М. Солтанова (Яңы Сувыл ауыл мәҙәниәт йорто);

2 –се дәрәжә лауреаттары:

Рада Ғәйнуллина, етәксеһе – Э. Вальшина (Бәжекәй ауыл мәҙәниәт йорто);

Алианна Юлфаризова, етәксеһе – А. Итәкова (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Илназ Көсөков, етәксеһе – Г. Хәмиҙуллина (Мәүлит ауыл мәҙәниәт йорто);

Яна Минһажетдинова, етәксеһе – Ж. Ҡорманғәлина (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

3-сө дәрәжә лауреаттары:

Камилла Хәйретдинова, етәксеһе – Ж. Ҡорманғәлина (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Көсөков Илназ, етәксеһе – С. Көсөкова (Оло Иҫәнгилде ауыл мәҙәниәт йорто).

**КОНКУРС ДИПЛОМАНТТАРЫ:**

Рената Ғәлиуллина, етәксеһе – Ж. Ҡорманғәлина (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Линара Абдрахманова, етәксеһе – Н. Хоҙайбирҙина (Бикҡол ауыл мәҙәниәт йорто);

Индира Садиҡова, етәксеһе – А. Итәкова (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Нәҙиә Әсәтова, етәксеһе – Ж. Ҡорманғәлина (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Илсиә Йомағужина етәксеһе – Ж. Ҡорманғәлина (Дәрүиш ауыл мәҙәниәт йорто);

Аделия Мөхәмәтшина, етәксеһе – Г. Бағаува (Аҡбаш ауыл мәҙәниәт йорто);

Эмилия Хәлимова, етәксеһе – Г. Бағаува (Аҡбаш ауыл мәҙәниәт йорто);

Арсений Балтағолов, етәксеһе – Шәйхисламова (Үләнде ауыл мәҙәниәт йорто);

«Йондоҙ» вокаль төркөмө, урта төркөм, етәксеһе – Л. Шәйхисламова (Үләнде ауыл мәҙәниәт йорто).

Бөтә ҡатнашыусыларға ла район башлығы ҡул ҡуйған иҫтәлекле бүләктәр һәм дипломдар тапшырылды. Конкурс Силәбе өлкәһе губернаторы ярҙамы менән үтә.

Балаларҙы ҡарлы көндәрҙә имен-аман алып килтергән автобус водителдәренә, ҡатнашыусыларға, етәкселәргә, ата-әсәләргә, ихлас рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Минең ярҙамсыларыма: алып барыусы Ҡотлохужин Асҡарға һәм бейеү флешмобында ҡатнашыусыларға, тауыш режиссеры Ершов С. А., вокал буйынса белгес Назарова Әминә Игорь ҡыҙына, (ул ҡатнашыусыларҙы баһалаусы ла), китапханасы Байрамғолова Р.Р., тәмле милли ҡамыр ризыҡтары өсөн Ситдикова Ф. Р. , конкурсты үткәреүгә үҙ өлөшөн индергәндәрҙең барыһына ла оло рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм!

«Тамсылар» район конкурсы ойошторолоуына 15 йыл самаһы. Уның тәүге еңеүселәре бөгөн ҙур сәхнәлә бик шәп йырлай. Улар – Кучукова Вилия, Мурзина Вилена, Зарипова Милена.

Бәлки, бөгөнгө ҡатнашыусылар араһында киләсәктә башҡорт эстрадаһының ысын йондоҙҙары ла булыр.

# ЯҢЫНАН ОСРАШҠАНҒА ТИКЛЕМ!

**Арғаяш халыҡ театры, Көньяҡ Уралдың атҡаҙанған халыҡ ижады коллективы район тамашасыларын «Өйләнеү» комедияһы менән ҡыуандырыуын дауам итә. Режиссеры Редик Ғәниев.**

Тәүгеләрҙән булып спектаклде ратҡолдар ҡараны. Тамашасылар залы тулы, залда көләү тамаша башланғандан алып аҙағына тиклем туҡтаманы. Аязғолда ла беҙҙе йылы ҡаршы алдылар.

Кисә Яңы Сувыл ауылы халҡы алдында сығыш яһанылар. Сувылсылар өсөн бер аҙ ояла инем, сөнки күптәр урындағы артистарҙы иғтибарһыҙ ҡалдырҙы. Килгәндәргә рәхмәт. Улар иң яҡшы тамашасылар булды, спектаклде матур ҡаранылар.

Театр – минең өсөн икенсе ғаилә. Унда һин бөтөнләй икенсе тормош менән йәшәйһең. Башҡа кешеләр тормошо, башҡа ваҡиғалар, башҡа ваҡыт геройҙары.

Мин театрҙы яратам. Шуға күрә мин уны ташламаным. Сәхнәлә уйнауымды дауам итәм. Арғаяш театрының нисек барлыҡҡа килеүен, уға нигеҙ һалыусы Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы Солтанованың актерҙарҙы нисек йыйыуын, тәүге репетициялар, постановкалар, еңеүҙәр нисек ауланғанын ишетеп кенә белмәйем, бар хәл-ваҡиғаларға үҙем шаһит булдым.

Театр эшен Альберт Хөсәйен улы Халиҡовтың ҡатыны Әнисә Абдулхай ҡыҙы менән бергә дауам итеүҙәрен дә үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Театрҙы улар үҙ йорто, ғаиләһе кеүек яратты.

Беҙгә бөгөнгө көндә ратҡан актерҙарыбыҙ Разия Әхмәт ҡыҙы, Рафаэль Йомасолтан улы, Вәсиә Ғаттар ҡыҙы, Ғәйфулла Абдулла улы етмәй. Уларҙың яҡты рухы хәтеребеҙҙә мәңге һаҡланыр.

Бөгөн театр, фанаттар ярҙамында, Харис Фазуллин, Фәниә Шафиҡова, Лира Хөсәйенова, етәксебеҙ Илдар Хәйретдинов, Розалиә Нәжметдинова, Маһинур Һаҙиева, Рәфис Нафиҡов, Зөлфиә Мөхәмәтйәнова кеүек актерҙарҙың энтузиазмы менән йәшәй.

Яңы Сувыл ауылы тамашасылары исеменән театр коллективына спектакль аша бүләк ителгән шатлыҡ, йылмайыу, яҡшы кәйеф өсөн рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Һәр кемегеҙгә һаулыҡ һәм уңыштар теләп ҡалам!

Театр район буйлап йөрөүен дауам итәсәк. Реклама, белдереүҙәрҙе күҙәтеп барығыҙ!

**Милә СОЛТАНОВА.**

ЯҢЫЛЫҠТАР

# ҠУРАЙСЫЛАРЫБЫҘ ЕҢЕҮҘӘРҘӘ

**Йәнә беҙҙең ҡурайсылар, Ильһам Хәсәнйән улы Йәғәфәров тәрбиәләнеүселәре, иң яҡшы ҡурайсылар исемлегенә инде.**

Алмаз Бикмәтов, Асҡар Ҡотлохужин, Аделина Сәйетғәлина Өфөлә үҙған атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, бөйөк ҡурайсы, Халыҡ йырсыһы Әҙеһәм Исҡужин исемендәге VII асыҡ ҡурайсылар конкурсында ҡатнашты.

Конкурс ике турҙан торҙо. Асҡар менән Алмаз икенсе турға уңышлы үтте.

Алмаз Бикмәтов үҙ йәш категорияһында 1-се урын алды. Асҡар Ҡотлохужин «Өмөт» номинацияһында махсус призға лайыҡ булды.

Алыҫ 80-се йылдарҙа Әҙеһәм Исҡужин Яңы Сувыл ауылына балаларҙы ҡурайҙа уйнарға өйрәтергә килә ине. Шул саҡта минең илле йәшлек атайым, Кәшшәф Абдрахман улы Үлмәҫҡолов, тәүге тапҡыр ҡурайҙы ҡулына ала һәм малайҙар менән бергә уйнарға өйрәнә.

Бөгөн Өфө ҡалаһының балалар сәнғәт мәктәптәренең береһе (әлеге Конкурс үткән) Әҙеһәм Исҡужин исемен йөрөтә.

Етәкселәрҙе һәм ҡурайсыларҙы уңышлы сығыш яһауҙары менән ҡотлайым. Артабан да яулар уңыштарығыҙ күберәк булһын! Алға!

# ХАЛЫҠТАР БЕРҘӘМЛЕГЕ КӨНӨ

**2023 йылдың 4 ноябре – халыҡтар берҙәмлеге Көнө. Беҙ тыуған ауылым Ишәләлә Зөлфиә еңгәм, Хәбисолтанова Зөлфиә үткәргән ҙур аятта булдыҡ. Аят Рәүфәнәнең ире һәм уның ата-әсәһе рухтарына Ғәзиз Хәмиҙулла улына һәм Ғилминур Сафа ҡыҙына бағышланды. Аятҡа 2 ағай-эне, Шаһей мулла һәм Шәйхезада мулла саҡырылды.**

Был көндө бөтә туғандар, ҡасандыр бергә йәшәгән, аралашҡан, бер -береһенә кәңәш һәм эш менән ярҙам иткән туғандар йыйылды. Һәм, әлбиттә, бөгөн беҙҙең менән булғандарҙың барыһы ла бер ҡасан да кире ҡайтарылмаҫлыҡ кешеләрҙе хәтерләй. Халҡыбыҙҙа ошондай әйтеү ҙә бар: «Кешеләрҙе иҫтәренә төшөрәләр икән, улар тере».

Аят мәлендә туғандарыбыҙ һәм таныштарыбыҙҙың берҙәмлеген тойҙоҡ. Йылдан-йыл ваҡыттың тиҙ үткәнен һиҙәбеҙ, туғандарыбыҙҙан йылдан-йыл йыраҡлашабыҙ... Бөгөн беҙ бер ҡайҙа ла ашыҡманыҡ, күп аралаштыҡ, арабыҙҙа бөгөн беҙҙең менән булмағандарҙы иҫкә төшөрҙөк. Беҙҙән һуң нәҫелебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе дауам итәсәк балаларыбыҙҙың күп булыуы ҡыуаныслы. Әгәр беҙ уларға аяттың, саҙаҡаның нимә икәнен күрһәтмәһәк, улар ҡайҙан белер? Һәр өлкән кеше балаларының һорауына яуап бирә алыр, тип уйлайбыҙ.

Был аятта Ғәббәсов Зәки Рәжәп улы ғаиләһен дә хөрмәт менән иҫкә алырға ваҡыт табылды. Мулла Шәйхизада ағай нәүбәттәге сүрәһен тап уның быйыл күктә яңынан берләшкән ғаиләһенә бағышланы. Хәҙер улар бөтәһе бергә: ағай, ҡатыны Мәрйәм, улдары Аликжан һәм беҙҙең Ирина. Зөлфиә еңгәбеҙ бөгөн бик ҙур эш башҡарҙы, сауаптарын (һауап) үҙеңә күп тапҡырҙар артып кире ҡайтарып бирһен. Йомартлығың өсөн рәхмәт. Беҙ һеҙҙең ағайыбыҙҙы уның изгелеклелеге, аҡыллылығы, эшһөйәрлеге, кешелеклелеге өсөн нисек баһалағаныбыҙҙы беләбеҙ. Арабыҙҙан мәңгелеккә киткән ятҡан һәм ғәзиз туғандарыбыҙҙың ауыр тупраҡтары еңел булһын. Кешеләр, үҙ-ара татыу йәшәгеҙ, бер-берегеҙгә ҡарата түҙемлерәк, иғтибарлыраҡ булығыҙ, туғандарығыҙҙы һәм яҡындарығыҙҙы һаҡлағыҙ!

**Гөлнәр БИКОВА.**

«Арғужа» гәзитенең барлыҡ сығарылыштарын түбәнге https://argayash.com/rubric/gazeta сайт аша табырға була.

Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәҡәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ: Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.